*Рауил* **БИКБАЕВ**

# Яҡташым, фекерҙәшем



Ҡешенең исеме есеменә тап килеп торғанда уның тормошо тағы ла балҡыбыраҡ күренә. Бына шуның матур бер өлгөһө: Академик Зиннур Ғәзиз улы Ураҡсин. Һүҙҙәрҙең яңғырашы, исем-шәрифтәрҙең мәғәнәһе менән шәхестең булмышы, йәшәйештең асылы бер-береһен ни тиклем тулы аса! Зиннур Ғәзиз улы ғәзиз атаһының, ғәзиз әсәһененң генә түгел, халҡыбыҙҙың ғәзиз һөйөклө улы, донъяға яҡтылыҡ илтеүсе нурлы кеше, ҙур шәхес булды. Һирәк осрай торған фамилияһы уның тырыш, тынғыһыҙ, уңышлы эшмәкәрлеген алдан билдәләп, тамғалап ҡуйған төҫлө. Ул ғүмере буйы телебеҙгә, туған һүҙебеҙгә хеҙмәт итте. Сәсте, үҫтерҙе, урҙы. Бәйләгән тығыҙ көлтәләре тос башаҡлы, уңыштары милләтебеҙҙең рухи бураларына байлыҡ өҫтәне. Академик тигән дәрәжәне мин ҙур хәрефтәр менән ерле юҡтан ғына яҙманым. Академиктарҙың да төрлөһөн беләбеҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был юғары исемде осраҡлы йөрөтөүселәр, лайыҡлы хеҙмәттәре менән түгел, йылғырлыҡтары менән алғандар ҙа бар. Академик тигән бейеклекте Зиннур Ураҡсин фәнни эшмәкәрлеге, ҙур-ҙур хеҙмәттәре менән яуланы.

Зиннурҙы мин студент сағыбыҙҙан уҡ беләм. Башҡорт дәүләт университетында ул минән бер курсҡа түбәнерәк уҡыны. Беҙ — башҡорт-рус бүлегендә, Зиннур Ураҡсин милли мәктәптәр өсөн уҡытыусылар әҙерләүсе рус бүлегендә белем алды. Тәүге танышҡандан уҡ аралашып йәшәнек. Һабаҡташтар ғына түгел, яҡташтар булыуыбыҙ ҙа беҙҙе яҡынайтҡандыр. Икебеҙ ҙә — Ырымбур башҡорттары. Башҡортостан Республикаһынан ситтә йәшәүсе милләттәштәребеҙҙең “Илемдә илемде һағынам” тигән юҡһыныуҙарын беҙ ҙә бәләкәстән кисереп үҫтек.

Университеттан һуң бер үк аспирантурала уҡыныҡ, бер үк көндә бер үк ғилми советта кандидатлыҡ диссертацияһы яҡланыҡ. Тормошобоҙҙағы ошо

оло ваҡиғанан һуң шатлыҡлы мәжлесебеҙҙе лә бергә ойоштorҙоҡ. Өфөнөң ул саҡтағы Матросов исемендәге төп паркындағы ресторанда Әхнәф Харисов, Ҡирәй Мәргән, Ғайса Хөсәйенов һымаҡ танылған ғалимдар менән күңел асҡаныбыҙҙы, остазыбыҙ, ул саҡта беҙҙең башҡорт филологтары араһында берҙән-бер профессор Жәлил Кейекбаевтың моңло ла, дәртле лә йырлап ултырғанын хәҙер һағынып иҫкә төшөрәм.

Зиннур Ураҡсин студент сағынан уҡ ваҡыттың ҡәҙерен белеп, ҙур маҡсаттарға ынтылып йәшәне. Тырыш булды, юлынан ситкә тайпылманы. Ул заманда был сифаттар бик күп йәштәргә хас ине. Илленсе-алтмышынсы йылдарҙа был юғары уҡыу йортонда белем алғандар араһынан күпме шағирҙар, әҙиптәр, ғалимдар, дәүләт эшмәкәрҙәре үҫеп сыҡты! Уларҙы барлай башлаһаң, был арҙаҡлы шәхестәр тураһында махсус хеҙмәт яҙырға кәрәк булыр ине. Зиннур Ураҡсин менән бер төркөмдә уҡыған һабаҡташтары ла үҙҙәренең маҡсатҡа тоғролоғо, ныҡышмалы хеҙмәте арҡаһында фән докторҙары булдылар: Борис Әхмәтшин, Кәрим Ишбаев, Дамир Азаматов, Венера Ибраһимова. Бер төркөмдән ниндәй исемдәр! Улар араһында иң ҙур ҡаҙаныштарға ирешкәне, әлбиттә, академик Зиннур Ғәзиз улы Ураҡсин.

Зиннур Ураҡсиндың ғилми фекерләү һәләте, ойоштороу оҫталығы асылғандан-асыла барҙы. Ғалим булараҡ та, етәксе булараҡ та ул тиҙ арала ҙур үҫеш юлы үтте. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында эшләй башлауына оҙаҡ ваҡыт та уҙманы, уға бүлек мөдире эшен ышанып тапшырҙылар. Артабан институт директоры урынбаҫары, оҙаҡ йылдар директоры булды. Ул етәкселек иткән осорҙа Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының абруйы тағы ла юғарыраҡ күтәрелде.

Үҙгәртеп ҡороуҙар емереү-ҡыйратыуҙарға әйләнгән йылдарҙа — уҙған быуаттың һуңғы дәүерендә быға ирешеү өсөн зирәк аҡыл да, дәүләт кимәлендә фекер йөрөтөү ҙә, һығылмалы дипломат, сәйәсмән булыу ҙа кәрәк ине. Зиннур Ураҡсин бына шундай сифаттарҙы үҙенә туплаған етәксе булды.

Тап уның директорлыҡ дәүерендә беҙҙең бүлектең ғалимдары башҡорт әҙәбиәтенең алты томлыҡ тарихын яҙҙы һәм был фундаменталь хеҙмәт донъя күрҙе. Башҡорт фольклорының 18 томлыҡ баҫмаһы республикала ғына түгел, тотош илдәге фән донъяһында ҙур ваҡиға булды. Зиннур Ураҡсин етәкселегендә һәм авторлығында Өфөлә лә, Мәскәүҙә лә бай йөкмәткеле, ҙур күләмле һүҙлектәр, хәҙерге әҙәби башҡорт теленең грамматикаһы һ.б. хеҙмәттәр баҫылып сыҡты.

Уҙған быуаттың туҡһанынсы йылдары башында Башҡортостан Республикаһының Фәндәр Академияһын ойоштороуға Зиннур Ғәзиз улы күп көс һалды. Уның тәүге академиктарының береһе булараҡ, гуманитар фәндәр бүлегенең академик-сәркәтибе, 1996 йылдан был ғилми ойошманың вице-президенты итеп һайланды. Уның туранан-тура ҡатнашлығында ойошторолған ғилми структура — “Башҡорт энциклопедия”һы Рәсәй Федерацияһындағы милли республикалар араһында иң тәүге булып “Башҡортостан” тигән энциклопедияны сығарҙы. Ете томлыҡ баҫманың донъя күреүенә лә энциклопедист ғалимдарыбыҙ ил күләмендә иң беренсе булып ireште.

Милләтебеҙ тормошондағы тарихи яңылыҡ — Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын ойоштороу, уның тәүге йыйынын үткәреү, документтарын әҙерләү — был бик яуаплы һәм ҡатмарлы эштәрҙә Зиннур Ураҡсин ең һыҙғанып ҡатнашты. Ошо ҡоролтайҙың баҫмаһы булған “Ватандаш” журналын барлыҡҡа килтереүҙә һәм уның тиҙ арала үҙенең йөкмәткеһе, бирелгән мәҡәләләренең йүнәлеше менән халыҡтың хөрмәтен яулауҙа уның беренсе баш мөхәррире академик Ғайса Хөсәйеновтың тынғыһыҙ тырышлығы менән бергә ҡоролтай идараһының тәүге рәйесе академик Нияз Мәжитовтың, шулай уҡ академик Зиннур Ураҡсиндың эшмәкәрлеге бик әһәмиәтле булды. Тәүге академиктарыбыҙ халҡыбыҙ өсөн бына шулай янып эшләне.

Зиннур Ураҡсиндың Башҡортостан тарихында күренекле ғалим булараҡ та, үҙенсәлекле әҙип булараҡ та бик абруйлы урыны бар. Әҙәбиәт донъяһына ул фәлсәфәүи мәғәнәле, тапҡыр уйлы query уймаҡ хикәйәләре менән килеп инде. Яҙыусының яңы жанр тыуҙырыуы бик һирәк күренеш. Зиннур Ураҡсиндың уймаҡ хикәйәләре бына шундай яңылыҡ тип баһаланырға хаҡлы. Ижади эҙләнеүҙәр дауам итте, хикәйәләргә повестар, романдар өҫтәлде. Һуңғы һулышына тиклем яҙыусы ҡулынан ҡәләмен төшөрмәне.

Зиннур Ураҡсин башҡорт тарихи прозаһының үҫешенә тос өлөш индерҙе. Ул төрлө фәлсәфәүи бәхәстәр тураһында түгел, милләттең яҙмышына бәйле бик тормошсан хәлдәр тураһында яҙҙы. Шулай уҡ егерменсе быуаттағы мөһим ваҡиғалар ҙа уның әҫәрҙәрендә сағыу сағылыш тапты. Әйтәйек, башҡорт атлы дивизияһында эскадрон командиры Әнүәр Хатип улы Насиров Башҡортостанда билдәле шәхес ине. Уның менән таныш булыуыма, үҙенең хәтәр яҙмышы хаҡында һөйләгәндәрен тыңлап ҡала алғаныма ҡыуанам. “Яугир” исемле повесында Зиннур Ураҡсин ошо легендар кеше тураһында киләсәк быуындарға барып етерлек һүҙ әйтте.

Төплө ғилми тикшеренеүҙәр үткәреү һәм шул уҡ ваҡытта әҙәби әҫәрҙәр ижад итеү — һәр береһе бик үҙенсәлекле, ҡуйылған талаптары буйынса ҡайһы саҡта бөтөнләй ҡапма-ҡаршы булған был эштәрҙе уңышлы алып барыу Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында уны ойоштороусы Ғабдулла Амантайҙан уҡ килә. Әхнәф Харисов, Ҡирәй Мәргән, Ғилемдар Рамазанов, Әнүр Вахитов, Мөхтәр Сәғитов, Вафа Әхмәҙиев бына шундай шәхестәрҙән ине. Миңә улар менән бергә эшләргә, ғилми һәм ижади уңыштарына ихлас ҡыуанырға насип булды.

Ғайса Хөсәйенов бөгөн дә әҙәбиәт тарихы буйынса тикшеренеүҙәрен дауам итә һәм башҡорт тарихи прозаһын үҫтереүгә ҙур өлөш индерә. Рәшит Шәкүр, Әхмәт Сөләймәнов, Мирас Иҙелбаев фәнгә лә, әҙәби ижадҡа ла тоғро хеҙмәт итә.

Тарихты барлаһаң, шәхестең күп сифаттағы эшмәкәрлекте үҙенә туплауы халҡыбыҙҙа борондан килгәнен күрәһең. Мәғрифәтсе, тарихсы Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев үҙенсәлекле шағир ҙа. Мәғрифәтсе, дин белгесе, журналист, энциклопедик ғилем эйәһе Ризаитдин Фәхретдинов әҫәрҙәрендә замандың үткер мәсьәләләрен күтәргән яҙыусы ла — уларҙың һәләттәре төрлө тармаҡта асылған. Халҡыбыҙҙың рухи талаптары буйынса һәр башҡорт үҙенең шәжәрәһен белергә, йырсы йәки ҡурайсы йырҙың тарихын һөйләргә

тейеш булған. Ҡәрәк саҡта ижадсы шағир ҙа, мәғрифәт юлындағы мөғәллим дә ҡаһарман яугирға әйләнгән. Ниндәй генә бурыс йөкмәтелһә лә, улар ил алдында ҙур яуаплылыҡ тойоп йәшәгән.

Яуаплылыҡ — Башҡортостан Фәндәр академияһының академигы, Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы Зиннур Ураҡсиндың барлыҡ тормош һәм хеҙмәт юлының төп асылын ошо сифат билдәләне. Һәр эшкә ул ҙур яуаплылыҡ тойоп тотонор, һәр эште еренә еткереп башҡарыр ине. Фәнни тикшеренеүсе булараҡ та, фәнде ойоштороусы булараҡ та Зиннур Ураҡсин республикала ғына түгел, унан ситтә лә абруйлы булды. Мәскәүҙә, илдең төрлө республикаларында, Төркиәлә күренекле ғалимдар менән аралашты, халыҡ-ара фәнни йыйындарҙа сығыш яһаны, ундай конференцияларҙы үҙебеҙҙә күп ойошторҙо.

Зиннур Ураҡсиндың ғилми эшмәкәрлегендә Башҡортостанда гуманитар фәндәрҙең үҫеше, йәш ғалимдар әҙерләү тураһында хәстәрлек һәр саҡ үҙәктә торҙо. Ул талапсан һәм ғәҙел етәксе, ярҙамсыл хеҙмәттәш ине. Ғилми эҙләнеүҙәрҙең йүнәлештәрен билдәләй, йәш көстәрҙе туплай, уларҙың уңыштарын тейешенсә баһалай һәм кәрәк саҡта принципиаль тәнҡитләй ҙә белде. Юғары дәрәжәләргә ирешһә лә, һауаланманы, ваҡланманы, ябай, алсаҡ булып ҡалды. Миңә Зиннур Ғәзиз улы менән бер заманда уҡырға, утыҙ йыл буйы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында бергә эшләргә насип булды. Әйтеүе генә анһат — утыҙ йыл! Ошондай оҙаҡ ваҡыт эсендә бер-береңде аңлап еткермәү арҡаһында аралар һыуынған, хатта боҙолған саҡтар ҙа булырға мөмкин. Зиннур Ураҡсин менән беҙ хеҙмәттәштәр ҙә, бер-беребеҙгә таяныrлыҡ фекерҙәштәр ҙә булып йәшәнек. Ул минең институтта яҙған монографияларым буйынса фекер алышыуҙарҙа ҡатнашты. Шәйехзада Бабич тураһындағы хеҙмәтем әҙәбиәтселәр тарафынан юғары баһаланып та, институттың ул ваҡыттағы етәксеһе һәм уның һүҙен ҡеүәтләргә тейешле пүнәтәйҙәре экзекуция ойошторғанда, Зиннур Ураҡсин хәлемде аңлаусы, ауыр саҡта миңә таяныс булырға тырышыусы иптәшем булды. Уҙған быуаттың аҙағында “Башҡорт шиғриәте антологияһы”н төҙөүҙе тамамлағас, был ҙур күләмле баҫманы бюджет аҡсаһынан тыш сығарыу өсөн республика буйлап әллә күпме спонсорҙар эҙләнек һәм ҙур ҡыйынлыҡтар аша булһа ла маҡсатыбыҙға барыбер ирештек: китап донъя күрҙе һәм мәктәптәрҙә, юғары уҡыу йорттарында, барлыҡ әҙәбиәт һөйөүселәр араһында бик кәрәкле сығанаҡҡа әйләнде.

2005 йылда сыҡҡан “Ҡарат” исемле һуңғы китабын миңә бүләк иткәндә Зиннур: “Рауил дуҫҡа, яҡташҡа, фекерҙәшкә иң изге теләктәр менән”, — тип яҙған. Беҙ бер-беребеҙгә шундай изге теләктәр менән йәшәнек. Ошо бүләкте ҡулыма алғандан һуң ни бары бер йылдан артығыраҡ ваҡыт үтер ҙә, ҡәҙерле һабаҡташымды, тоғро хеҙмәттәшемде һуңғы юлға оҙатырбыҙ, был ҡайғылы көндә уның табуты янында һүҙ әйтермен тип кем уйлаған? Уның ғүмере өҙөлгән мәл яҙҙың әле яңы башланған сағы ине. Бәхилләшкән көн мәрхүмдең үҙе һымаҡ ҡояшлы, йылы торҙо.

Зиннур Ғәзиз улы Ураҡсинды белгәндәрҙең күңелендә ул яҡты, нурлы, ихлас кеше, оло йөрәкле шәхес булып ҡаласаҡ. Минең тормош юлымда ундай шәхестәр күп булманы. Уның ғилми һәм әҙәби китаптары халҡыбыҙ хәтерендә һаҡланасаҡ, фәнни хеҙмәттәре киләсәктә нығыраҡ баһаланасаҡ.